*Әмир ӘМИНЕВ,*
*яҙыусы*

# ВАҠЫТ ТЫУҘЫРҒАН ШӘХЕС



Вил Бәшир улы Ғүмәров (Кәбир Ғүмәр) 1949 йылдың 2 апрелендә Учалы районының Ҡобағош ауылында тыуған. Райондың Миндәк урта мәктәбен тамамлағандан һуң Магнитогорск тау-металлургия институтында уҡый, институттан һуң Пермь, Мурманск өлкәләрендә инженер булып эшләй. 1975 йылда ул Мәскәүҙәге М.Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға керҙе. Керҙе тим, быға тиклем уның тормошон белмәһәм дә, ҡалған ағы, вафатына тиклем, минең күҙ алдында үтте. Мәскәү институтынан һуң Өфөгә ҡайтып «Башҡортостан» гәзите, «Ағиҙел» журналы редакцияларында, «Китап» нәшриәтендә хеҙмәт итте, ғүмеренең һуңғы һигеҙ йыл тирәһен Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһында эшләне, шуның байтаҡ өлөшө әлеге ойошманың яуаплы сәркәтибе вазифаһында үтте.

Ижад кешеһе булараҡ ул, иң беренсе сиратта, әлбиттә, шағир ине. Институтта билдәле урыҫ шағиры Лев Ошанин семинарында шөғөлләнде. Әйтергә кәрәк, бик теләп йөрөнө ул семинарҙарға, белемгә, яңылыҡҡа ынтылышы көслө булды, шиғриәт теорияһын, ҡанун-закондарын ныҡлап өйрәнде. Күп уҡыны, эҙләнде, төрлөсә яҙып ҡараны. Талип осоронда һәм үҙебеҙгә ҡайтҡандың тәүге йылдарында ижад ителгән шиғырҙары китап булып донъя күрҙе («Тау йылғаһы», 1983). Икенсе йыйынтығы 1994 йылда нәшер ителде, уныһы «Ауыл көйө» тип атала. Бынан тыш ул ҡәләмдәштәренең яңы әҫәрҙәренә рецензиялар, мәҡәләләр яҙҙы.

Илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, шағир бөтә булмышы менән тиерлек публицистикаға тотондо. Аҡыллы кеше булараҡ, ул йәмғиәтебеҙгә йылы елдәр, яңылыҡ кәрәклеген һиҙә ине. Гәзиттә, журналда эшләгән осоронда ул республика буйлап күп йөрөнө, төрлө һөнәр кешеләре, ҡыҙыҡлы шәхестәр тураһында һүрәтләмәләр, мәҡәләләр яҙҙы, шиғриәт, бейеү, йыр сәнғәте хаҡында ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр яҙны. Ғөмүмән, Вил Бәшир улы төрлө яҡлы, эҙләнеүсән, киң мәғлүмәтле шәхес ине. Уның икенсе юғары уҡыу йортона уҡырға инеүе лә ана шул холҡонан бит. Мәҫәлән, миндә уның 1987 йылда Стәрлетамаҡтан яҙған бер нисә хаты һаҡлана. Шуларҙың береһендә ул әҙәбиәтебеҙ өсөн «Ағиҙел» журналының ғына биттәре тар булыуы, ижади йәш көстәр өсөн журнал кәрәклеге тураһында яҙа. Ул уны «Замандаш» тип исемләгән, баҫманың күләме, унда эшләйәсәк кешеләр һаны, журналдың йүнәлеш-тематикаһы, авторҙар коллективын билдәләгән, хатта йыллыҡ подписка хаҡы ла бар! Шуныһы ҡыҙыҡ, ошо йәштәр баҫмаһына ул баш мөхәррир итеп мине «тәғәйенләгән»... Шағир хыялы алты йылдан тормошҡа ашты — 1993 йылдың аҙаҡтарында республикала йәштәр журналы «Шоңҡар» сыға башланы. Әлбиттә, ул йылдарҙа йәштәр баҫмаһы кәрәклеген ул ғына күтәреп сыҡманы, әммә әлеге мәсьәләне былай бөтә деталдәренә тиклем ҡағыҙға төшөргән бүтән кешене мин белмәйем.

Уның алдан күреүсәнлеген, актив, хәрәкәтсән ижади шәхес булыуын иҫбатлаусы йәнә бер миҫал. Байтаҡ йылдар Владивостоктың бер гәзитендә эшләгән һәм ситтән тороп Әҙәбиәт институтында уҡыған Денисов фамилиялы егет өс йыл самаһы әүәл Өфөгә килеп «Истоки» гәзитенә эшкә урынлашты. (Тыумышы менән Свердловск өлкәһенән). Танышып һөйләшеп киткәс был, Ғүмәров тигән кеше ҡайҙа әле, тип һорай ҡуйҙы. Институтта танышҡандарҙыр, тип уйлайым үҙемсә, юҡ, таныш түгелдәр икән. Баҡһаң, Вил уның Владивостоктан икәнен ҡайҙандыр белгән дә



*Ғ. ӘНҮӘРОВ*

# ИМИТАТОР

Йәйге ҡояштың тәүге нурҙары менән ауыл уянды. Ҡарға ҡарҡылдауына, өйрәк быжҡылдауына үгеҙ үкереүе, быҙау мөзөлдәүе ҡушылды. Ҡаршы тауҙағы урманда өкө уфылданы. Һыйырын һауа һалып көтөүгә ҡыуып ҡайтҡан йәш киленде имсәк балаһының айырата наҙлы сәрелдәүе өйгә ашыҡтырҙы...

Ҡояш күтәрелә төшкәс, сыбар тауыҡ ҡытҡылдай-ҡытҡылдай ояһынан осоп төштө. «Йомортҡа һалдым, сығып алығыҙ!» — тип яу һалды. Тауыҡ янында үҙенең кемлеген күрһәтергә теләгәндәй, кикереген ҡыйыш һалып, һул ҡанаты менән ер һепереп, әтәс өйөрөлдө. Аҫтыртын-аҡыллы кәзәләр, әмәлен табып, көтөүҙән тороп ҡалған. Ураҡтай уралған, арҡаһына тейер-теймәҫ мөгөҙҙәре менән маһайған тәкә бышҡыра-бышҡыра кәзәләрен тауға әйҙәй. Әсә, сабыйын имеҙеп, тынысландырҙы. Өй башындағы бесәйҙәрҙең талашып сыр-сыу ҡубыуына һөт айырғыстың геүләүе өҫтәлде. Трактор тоҡандырҙылар. Ауыл тамам уянды...

Вәкил Хөснөтдин улы Ғәтиәтуллиндың ғәжәп һөнәрен ҡарап, тыңлап ошондай күренеш күҙ алдынан үтә. Үҙенә генә хас сәнғәттең оҫтаһы һеләүһен һымаҡ йомшаҡ ҡына баҫып сәхнәгә сыға ла, шул ҡоштарҙың, хайуандарҙың ҡылыҡтарын, бала илауын, һөт айырғыс, трактор тауыштарын ауыҙынан сығарып, бик килештереп эләкләй. Былай ҙа алсаҡ Вәкил Ғәтиәтуллиндың концерт ваҡытындағы ҡыланыштарына бер кем дә битараф була алмай: кинәнеп тамаша ҡылалар, эстәрен тотоп көләләр.

Был сәнғәт төрө — имитация — һирәк осрай. Әҙәбиәттә лә мәғлүмәттәр юҡ тиерлек. Шулай ҙа урыҫ әҙәбиәтендәге «Һандуғас» тигән хикәйәлә ошондай һөнәргә эйә булған Әхмәт исемле башҡорттоң трагик яҙмышы хаҡында яҙылған. (П.И.Добротворский. «В глуши Башкирии», Өфө, 1989, 47-се бит). Әҫәрҙә Әхмәт һандуғас булып һайрап, ҡоштарҙың, хайуандарҙың тауыштарын сығарып, ауылдан-ауылға йөрөп тамаша күрһәткән, шул һөнәре менән көн күргән. Бәләкәй буйлы, ҡатҡыл ҡуллы, ҡара күҙле, осло танаулы тартай Әхмәттең ялтырауыҡ күҙҙәренә, ҡайһы яғы менәндер ҡоштоҡон хәтерләткән йөҙөнә ҡарап, уның был һөнәре шул ирмәклегенә бәйлелер, тип уйлайҙар.

— Эй, знаком, ҡайҙа киттең? — тип һорай Әхмәттән бер урыҫ танышы.

— Куда? Город идем. Там дурак много, соловьем свистим — деньга наша дают.

Әхмәт тураһында ошоларҙы уҡып сыҡҡас, ирекһеҙҙән Вәкил ағай күҙ алдына килеп баҫа. Ул да ҡыҫҡа буйлы, йыуантыҡ, яҫы битле. Күҙҙәре уйнап тора, кәрәк саҡта ҡояштай ялтырап торған йөҙ мимикаһы, ҡыланыштары, әйтерһең дә ошо ижад төрө өсөн генә ҡулайлашҡан.

Вәкил Ғәтиәтуллин да Абдулла Солтанов, «Ләйсән» бейеү коллективы менән күп юлдар үтте, районға һәм ансамблгә дан-шөһрәт яулашты. Үҙенең ҡабатланмаҫ, мөғжизәле таланты менән замандаштарын көлдөрөп, ҡыуандырып, эштәренә дәрт-дарман биреп йәшәй ул.





Мәшһүр йырсының ижады тураһында хәҙер инде байтаҡ белгестәр, сәнғәт эшмәкәрҙәре, яҙыусылар үҙ фекерҙәрен әйтте. Шағир Ҡәҙим Аралбаев, мәҫәлән: «Уның йырын тыңлау — үҙе бер оло ҡыуаныс, рухи ләззәт һәм илһам сығанағы. Уны тыңлаған һайын халҡыбыҙҙың бөйөк йыр-моңона мөкиббән биреләһең, илаһи йоғонтоһонда ҡалып, был тауыштың музыкаль юғарылығына һоҡланып ултыраһың, үткән дәүерҙең билдәһеҙ сәсән-шағирҙары һәм йырсылары беҙгә ҡалдырған үлемһеҙ йырҙарынан тормош һабағы, йәшәүгә дәрт, көрәшкә сәм алаһың», — тип яҙҙы.

Эйе, атаҡлы йырсы башҡарыуында халҡыбыҙҙың иң-иң төплө йырҙары «Урал», «Томан», «Йәмәлекәй тау», «Сибай», «Зөлхизә», «Сәлимәкәй», «Хисам», «Буранбай» бигерәк аһәңле яңғырай шул. Шағир, ғалим Рәшит Шәкүр: «Башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар араһында Абдулла ағай хәҙер бына күп йылдар инде иң ҙур абруйҙарҙың береһе», — тип әйтеп уның талантына оло баһа бирҙе. Арҙаҡлы әҙиптәрҙән Зәйнәп Биишева, Ғәзим Шафиҡов, Рәшит Солтангәрәев, Таңсулпан Ғарипова халыҡ йырсыһының ижады тураһында һоҡланып яҙҙы.

1977 йыл. I Бөтә Союз фестивале лауреаттарының йомғаҡлау концерты Мәскәү Кремленең Съездар Һарайында әҙерләнә. Ҙур йыйынға ниндәй генә таланттар йыйылмағайны! Ейәнсура районы ҡурайсылары менән бергә Абдулла ағайҙан «Урал» көйөнөң бер генә өлөшөн йырлатасаҡтар. Бүтәнсә ваҡыт бирмәйҙәр. Концертҡа Л.И.Брежневтың килергә тейешлеге айырыуса яуаплылыҡ өҫтәй. Репетиция барған көндәрҙең береһендә концертты уҙғарыусы профессиональ оркестрҙың дирижеры Абдулла ағайҙың ҡайҙан, кем икәнлеген һорай, ҡайҙа уҡығанлығы менән ҡыҙыҡһына. Аңлатып һөйләп биргәс, аптырап: «Чудеса! Откуда такой голос?!» — тип аптырай.

Ағиҙеле лә, Яйығы ла Ирәмәлдән сыҡҡан һымаҡ, әллә башҡорттоң йыр-моңо ла Учалы ерендә тамыр йәйгәнме икән? Аҡмулланың аҡ эҙҙәрен һаҡлаған төйәгебеҙҙән танылған йырсылар Нажиә Аллаярова, Флүрә Килдейәрова, Нәзифә Ҡадирова, композиторҙар Абрар Ғабдрахманов, Салауат Низаметдинов сыҡты. Күпме яҙыусылар, фән эшмәкәрҙәре бирҙе һәм Башҡортостандың ғорурлығы Абдулла Солтановты бүләк итте Учалы. Тормоштоң үҙгәреп тороуына, иҡтисади ауырлыҡтарға, аҡса юҡлыҡҡа ҡарамаҫтан, беҙҙең төбәктә сәнғәткә ҡараштың юғары кимәлдә ҡала килеүе йыуандыра. Мәҙәниәт министрлығында эшләүсе яҡташыбыҙ Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратова Учалы хакимиәтенең мәҙәниәт идаралығы тырышлығы менән йыш ҡына етди сараларҙы, республика кимәлендәге конкурстарҙы, фестивалдәрҙе беҙҙә уҙғара. Районда балалар музыка мәктәптәре, ауылдарҙа уларҙың филиалдары эшләүе, Уральскиҙа балалар халыҡ ижады йорто асылыуы балаларҙың киләсәгенә өмөт уята.

Мәшһүр йырсыбыҙ Абдулла Солтановтың сихри моңонан яңынан-яңы йырсылар илһам ала. Тимәк, йыр шишмәһе ҡоромай.